# Теле барҙың – иле бар

Вәлиева Альбина Амур ҡыҙы
Әбдрәшит башланғыс мәктәбе – балалар баҡсаһы



21 февраль-
Халык –ара
туған тел
көнө!

Тел –ул бөтөн халыҡтың ҡаҙанышы, меңләгән, миллионлаған кешеләрҙең дәүерендәге ижад емеше. Тел бөтһә, ул телдең эйәһе булған халыҡ, милләт юғала. Туған телен һаҡлау, үҫтереү, уның сафлығы, матурлығы өсөн көрәшеү-һәр кемдең изге бурысы.

Кешенең тормошо тел менән бәйле.Туған телебеҙ- башҡорт теле, ҙур тарихлы, бай, йырлы, моңло тел ул.


Бөйөк кешеләр,
ғалимдар, яҙыусылар
туған тел
тураһында

Тимер Йосопов

## ТУГАН ТЕЛЕМ

Туған телем бер генә,
Туған телем — иманым.
Тел асылды — күҙ асылды,
Берсә көлөп иланым.
Телем — хәтәр ҡоралым,
Телем, һин — уҡ-һаҙағым.
Шул телемдә һөйләйем дә
Шул телемдә яҙамын.
Телем минең — яҡты нур,
Нурһыҙ ниндәй көнөм бар,
Нурһыҙ ниндәй төнөм бар?
Салауаттар һөйләшкән,
Хаҡлыҡ өсөн көрәшкән
Минең туған телем бар.



Доға ҡылам: "Илем! – тип, –
Минең берҙән-берем!" –
тип.
Ерем, телем , динем, тип,
Ерем,
Телем,
Динем, тип!



Үҙ әсә телем – минең өсөн матур, иң тәмле тел; үҙ телем – үҙ әйберем булған өсөн ярата күңел.
(М.Ғафури)

Һүҙ – ул телмәрҙең нигеҙ ташы. Үҙ халҡына һәм туған телгә булған мөхәббәт бер-береһенә айырылғыһыҙ бәйләнгән. Халыҡтың йәнле һөйләү теле – ул әҙәби телдең шишмәһе. Әсә теле – мәктәптә белем һәм тәрбиә ҡоралы.
(Ж.Ғ.Кейекбаев)

Ил менән тел төшөнсәһе миңә бер бөтөн. Мин әсәмдең телен уның үҙенән йолҡоп алып ҡарай алмайым. Ул тел минең үҙ телем һәм ул минең иң тура ата торған ҡоралым.
(Р.Ғарипов)

Тел үҙенең ҡулланыу өлкәһе ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, йәмғиәттең иң ҡиммәтле хазинаһы һанала.
(Ж.Кейекбаев)



# Телгә һөйөү ғаиләнән башлана



Телгә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу уятыу алымдары нимәлә?

Әлбиттә



Йолаларҙа, ғөрөф-ғәҙәттәрҙә



Йыр-бейеүҙәрҙә





Милли уйындарҙа

Тылсымлы һандыҡ

# Әкиәт батырҙары



# Мәҡәлдәрҙә

| | |
|---|---|
| 1. Ете ҡат үлсә, | белемле меңде еңер |
| 2. Көслө берҙе еңер | бер ҡат киҫ |
| 3. Ашыҡҡан | ҡулы етәү |
| 4. Егәрленең | ашҡа бешкән |

# Конкурстарҙа


















**Ер хәтерендә**
**Мең йыл уйылып барған эҙем бар.**
**Быуындарға ялғап быуындарҙы**
**Илде тотҡан телем, һүҙем бар!**



# ХӘТЕРЕҢДӘ ТОТ!!!

- 21 февраль – Халыҡ-ара туған тел көнө.
  Беҙҙең республикала 14 тел өйрәнелә, уҡытыу 6 телдә алып барыла.
- БМО мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ер шарындағы 6700 телдең яртыһына юғалыу ҡурҡынысы янай.

# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!